27 декабрь 2012 йыл

# ЙӘЙҒОР

№ 8(31)

Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты гәзите

## С НОВЫМ ГОДОМ!

*Наступает долгожданный и радостный праздник детства встреча Нового года. Оглянитесь на прошедший год, он принес немало хорошего, и пусть все достижения и победы уходящего календаря преумножаться в новом году, полном открытий и торжеств! А старый год унесет с собой все то, что приносило разочарования. Впереди реализация планов и исполнение желаний. Пусть год приходящий будет богат яркими, радостными событиями! Желаем вам безмерного счастья, отменного здоровья, восторженного настроения. Пускай за любым поворотом судьбы вас ждут потрясающе прекрасные события, которые принесут вам и вашим близким благополучие, уверенность в завтрашнем дне.*

*Пусть все задуманное в Новогоднюю ночь- случится, мечты - сбудутся!*

*ВЕСЕЛЬЯ! УЛЫБОК! СЧАСТЬЯ!*

*Парламент РХГИ*

Әллә ҡасандан, фән өлкәһендә эшләгән ғалимдар, сәләмәт һаулыҡ алып барыу организмға бик кәрәк икәнен асыҡлағандар. Спорт уҡыуҙа, фән өлкәһендә, уңышлы булыуҙа ярҙам итә. Ә бит бының өсөн күп кәрәкмәй: теләк һәм ихтыяр көсө, гел һау, матур, йәш ҡалам тиһәң спорт менән шөғөлләнергә кәрәк. Гимназияла беҙ сәнғәт менән генә мауыҡмайбыҙ, шул уҡ ваҡытта спорт менән дә шөғөлләнергә өлгөрәбеҙ. Спорт беҙгә физик яҡтан да, аҡыл яғынан да, үҙ һаулығыңа ҡәтғи ҡараштa булыуҙа ла ярҙам итә. Сәләмәт кеше һәр эштә лә алдынғы була.



Бөгөн гимназияның спорт залы шаугөр килә. Ни булған уларға? Тегендә бында йүгерешәләр, ҡунаҡтар ҙа бар икән… Стенала ҙур хәрефтәр менән "Әсәй, атай, мин – спорт ғаиләһе" тигән яҙыу эленгән. Тимәк, беҙҙә бала саҡ һәм ғаилә именлегенә арналған спорт сараһы.

Сарала бөтәһе биш команда ҡатнашты. Улар : 6а, 6б, 7а,7б, 7в класы уҡыусылары һәм ата-әсәләре.



Сара барышында етеҙлеккә өлгөрлөккә, уңғанлыҡҡа, батырлыҡҡа, тиҙлеккә төрлө ҡыҙыҡлы конкурстар уҙҙы.

Бына инде мауыҡтырғыс конкурстарҙан һуң еңеүселәрҙе лә билдәләргә ваҡыт етте.

Шулай итеп беренсе урынды "Ғәләм ғаиләһе" командаһы яуланы, икенсе урын "Позитив" командаһына бирелде һәм өсөнсө урын "Спорт йондоҙҙарына". "Лидерҙар" командаһы "Иң шәп визитка", "Супер ғаилә" "Иң татыу ғаилә" номинацияһына лайыҡ булдылар. Афариндар! Еңеүселәргә төрлө бүләктәр, грамота һәм беҙҙең гимназия ашханаһының алма татлы бәлеше тапшырылды.

Ә мин уларға сәләмәтлек, таҙалыҡ теләп ҡалам.

***Байзигитова Зөһрә 11А класы***

## Сәләмәт йәштәр

Ошо көндәрҙә 9в һәм 10б класы уҡыусылары Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Республика Милли китапханаһында булып «Сәләмәт йәштәр» исеме аҫтында үткәрелгән түңәрәк өҫтәлдә ҡатнаштылар. Һүҙ наркомания тураһында барҙы. Программа буйынса бик күп эш төрҙәре ҡаралған ине.

Был сара «Һеҙ тормошто яратаһығыҙмы?» тигән һорауҙан башланып китте. Эйе, тормош – кешегә тыумыштан бирелгән иң ҙур, иң ҡиммәтле байлыҡтарҙың береһе. Һәр кемдең тормошо бәхетле һәм матур булырға тейеш. «Ә нимә һуң ул бәхетле тормош?» тигән һорауға уҡыусылар төрлөсә яуап бирҙеләр: «Һаулыҡ», «Спорт менән шөғөлләнеү», «Дуҫлыҡ», «Мөхәббәт», «Байлыҡ» һ. б.

Артабан һүҙ Өфө ҡалаһы Киров районының үҫмерҙә наркология кабинеты мөдире Фәткуллина Лилиә Лирун ҡыҙына бирелде. Ул «Наркомания – дауалауға үтә ауыр бирелә торған ауырыу. Наркотик матдәләрҙе даими ҡулланыу арҡаһында кешенең мейеһе, бауыры, бөйөрҙәре һәм башҡа органдары зыян күрә. Үлемесле ағыу ҡулланыусыларҙың ғүмере, дауаланмаған осраҡта, тәүге дозанан һуң ете йылдан да артмай.» тип әйтеп үтте. Үҙенең эш тәжрибәһенән миҫалдар килтерҙе. Лилиә Лирон ҡыҙы уҡыусыларҙы борсоған һорауҙарға ла яуап бирҙе.

Тик наркотик һаулыҡҡа ғына зыян килтереп ҡалмай, закон менән дә ҙур проблемалар тыуҙыра. « Наркоман – йәмғиәт өсөн бик ҡурҡыныс кеше. Наркотик: «Урла, үлтер, яңы доза табып ҡабул ит, юғиһә мин һине ҡот осҡос яфаларға дусар итәм,» - тип ҡотортоп тороусы мәрхәмәтһеҙ йәлләт (палач). 40 процент фатир талауҙар, 90 процент кеҫә ҡараҡтары наркомандар өлөшөнә тура килә» - тип әйтеп үтте Башҡортостан Республикаһы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың хоҡуҡ мәғлүмәттәре Үҙәк мөдире Сенников Николай Львов улы үҙенең сығышында. Кешеләрҙе наркоманиянан ҡотҡарыр өсөн бөтә дәүләттәрҙә лә ҡаты саралар күрелә. Башҡа юл юҡ. Беҙҙең илдә хатта бәләкәй генә доза наркотикты һаҡлау ҙа закон тарафынан тыйыла һәм ҡаты хөкөм ителә.

Докладтан һуң уҡыусылар иғтибарына наркотиктарҙың зарары тураһында фәһемле фильм тәҡдим ителде. Сараның һуңында балалар темаға ярашлы һүрәттәр төшөрөп, уйын уйнап та өлгөрҙөләр.

*Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*
*Колманова Лира Әхмәр ҡыҙы*

## Телем ғорурлығым

Донъяла төрлө халыҡтар бар. Бер халыҡ үҙенең тауҙары, бер халыҡ үҙенең далалары, өсөнсөһө һыуҙары, дүртенсеһе урмандары менән дан тота. Әммә ләкин һәр бер халыҡтың тыуған теле бар. Тел- ул һөйөндөрөрлөк тә, йөрәкте көйҙөрөрлөк бик бөйөк көс. Тел-күңелгә бал булып, ireп, ҡаҙау булырҙай рәнйетә ала. Халыҡ тел тураһында бик күп йырҙар, мәҡәлдәр, риүәйәт-легендалар уйлап сығарып, быуындан-быуынға һөйләгәндәр, тапшыра килгәндәр.

Беҙҙең башҡорт халҡы ла теленең үҙенсәлеге менән айырылып тора. Башҡорт теле – бик күркәм, бик бай. Тел – ул тере шишмә. Ысын башҡорт балаһы бишектә ятҡан сағынан әсәһенең наҙлы тауышын, хаҡ башҡорт, ата-әсә телен ишетеп үҫә, башҡорт теленең ныҡлы рухын үҙенә һеңдереп бара. Мин дә ысын башҡорт, бөрйән ырыуы балаһы булараҡ, башҡорт телендә һөйләшәм, бөтә башҡорт ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын үтәйем.

Минең исемем Ынйығөл- ынйы сәскәһе, аҡсәскә тигәнде аңлата. Ата-әсәйем беҙгә саф башҡорт исемдәрен бирҙе, апайым Таңсулпан- таң йондоҙо тигәнде аңлата. Өйҙә, байрамдарҙа саф башҡортса аралашырға тырышабыҙ.

Башҡорт теле – күпме сафлыҡ, наҙ урғыла был һүҙҙәрҙән… Башҡорт теле ул намыҫ, хаҡлыҡ, ул ҡая –таштарҙай – данлы, мәңгелек!

Ҡәҙим Аралбай, Зәйнәб Биишева, Мәжит Ғафури, Рәми Ғарипов – башҡорт теленең сикһеҙ байлығы, ҡото менән һоҡланып бик күп шиғырҙар ижад иткәндәр. Һоҡланмаҫлыҡмы ни, туған телем?! Үҙемдең дә туған телем тураһында шиғырҙарым, легендаларым бар.

Әммә башҡорт теле һаҡлауға мохтаж, сөнки йәш быуын, туған телдәрен күбеһенсә оноталар. Шуның өсөн башҡорт телендә кисәләр, конкурстар, фестивалдәр уҙғарыла. Башҡорт телен һаҡлау темаһына конференциялар йыш ҡына үткәрелеп тора.

Мин ожмах мөйөшөндәй Башҡортостанда тыуыуыма, саф башҡорт телендә ябай ғына еңел һөйләшеүемә, аралаша алыуыма ғорурланам. Башҡорт исемен, телен бысратмаҫмын, башҡорт телен һаҡлармын, тип һүҙ бирәм.

*Ишбулатова Ынйығол, 7В класы*








4 декабрҙә беҙҙең гимназиябыҙҙа гөрләп КВН да үтеп китте. Бөтә командалар ҙа актив ҡатнаштылар. Шаян егеттәр һәм ҡыҙҙар ҡыҙыҡ-ҡыҙыҡ мәҙәктәрен сәхнәләштерҙе. Афарин! Артабан да уларға уңыштар теләп ҡалабыҙ.

*Абдрафиҡова Гөлназ,*
*11Б класы*










Оҙаҡ көткән ҡыш килде,
Матур булып ҡар яуҙы.
Сабый ҡарҙар бит һауала,
Ҡаршылайҙар һәр кемде.
Ябалаҡлап ҡар яуа,
Шул ҡарҙың өҫтөндә,
Ҡояш апай нурындай,
Ялтлай ул ҡар һәр көндә.

***Баширов Анил,***
***8Б класы***

**Ҡыш миҙгеле**

Килеп етте ҡыш миҙгеле,
Тирә-яҡта ап-аҡ ҡар.
Шундай матур ҡыш көндәре,
Сана шыуа балалар.
Ап-аҡ ҡар бөртөктәре,
Яуалар ябалаҡлап,
Шундай матур мөғжизәне.
Мәңге онотмаç һымаҡ.

***Вәлиева Илүзә,***
***8Б класы***

**Ҡышҡы мәл**

Аҙым һайын ҡыштырҙаша,
Ерҙә ҡар бөртөктәре.
Шул көй минең әле генә,
Кәйефемде күтәрҙе.
Йомро ғына ҡар алдым да,
Тәгәрәтә башланым.
Һә тигәнсе өй алдында
Ҡар бабайҙы яһаным
Саҡырҙым иптәштәремде
Саналарҙы беҙ алдыҡ.
Тау башына мендек тә беҙ
Аҫҡа табан елдерҙек.
Эй, осабыҙ бергәләп беҙ
Биткә ҡарҙар бәрелә.
Шундай бәхетле минуттар
Ҡалһын ине хәтерҙә.

***Рәхимҡолова Ләйсән,***
***8Б класы***

Күптән инде көтөп алған
Ҡыш көндәре лә етте.
Ап-аҡ ҡарҙар төшә күктән,
Һыуыҡ көндәр ҙә етте.
Ябалаҡлап ҡарҙар яуа,
Күбәләк осҡан кеүек,
Шундай матур ҡар бөртөгө,

***Ғималова Айһылыу,***
***8Б класы***

Ябалаҡлап бөгөн ҡар яуа,
Бала саға өйҙәренән сығып-
Бергәләшеп уйнап, ҡыуана.
Көнөн-төнөн саф һауала,
Улар сана шыуалар
Бер-береһен ҡарҙар бәреп
Эй ҡыуана! Балалар!
Шатлыҡтары йылға кеүек
Киңәйә бара.

***Ниғмәтуллин Ринат,***
***8Б класы***

**Ҡыш**

Ябалаҡлап ҡарҙар яуа,
Хәтерләтә улар йондоҙо.
Тышта бөтә ерҙә саф һауа,
Хәтерләтә ҡыш һылыу ҡыҙҙы.
Һыуыҡ булһа ла ул оҡшай беҙгә,
Рәхәтләнеп сана шыуабыҙ.
Күп рәхмәттәр әйтәбеҙ был миҙгелгә,
Рәхәтләнеп елде ҡыуабыҙ.
Яҡты йылы көндә сығып,
Ҡар бабайҙы эшләйбеҙ.
Бер-беребеҙҙе ҡарға йығып,
Көйҙәр көйләп алабыҙ.
Их, рәхәт тә инде ҡыш көндәре,
Донъя ап-аҡ шәлен кейгәндә,
Их, йомшаҡ тәбиғәттең мендәре,
Тауға сана тотоп менгәндә.

***Дәминдәрова Эльмира,***
***8В класы***

***Уҡытыусыһы Ғәзизова Әклимә***
***Сәфәрғәли ҡыҙы.***

Гәзит 2000 йылдан башлап нәшер ителә
Тиражы: 50 экз.
Мөхәрриәт:
Йылҡыбаев Б., Шагалина Н., Даминдарова Э.
Баш мөхәррир урынбаçары:
Мәхмүтова Н.С.
Баш мөхәррир:
Хакимйәнова Венера Салауат ҡыҙы
Верстка, дизайн:
Радионов Артур Иванович